Рәсәй Федерацияһы Башҡортостан Республикаһының муниципаль район Учалы районының Исхаков Алмас Сәлим улы исемендәге Уральск ауылы муниципаль бюджет белем биреү учреждениеһе урта дөйөм белем биреү мәктәбе

| | | |
|---|---|---|
| Ҡаралды<br>Мәктәп методик берекмәһе етәксеһе<br>Р.Р. Камалова<br>________________<br>Протокол №<br>«__»__________2023 й. | «Килешелде »<br>директор урынбаҫары<br>Д.О.Сәйетхужина<br>________<br>«30» 08 2023 й. | «Раҫлайым »<br>Директор<br>Ганиева А.Р.<br>________<br>Приказ № 159<br>«30» 08 2023 й. |

1-се категориялы уҡытыусы
Дәүләтшина Мөнирә Сарим ҡыҙының

**10-сыСИНЫФ ӨСӨН**
**«ТУҒАН (БАШҠОРТ) ӘҘӘБИӘТЕ», «ТУҒАН (БАШҠОРТ) ТЕЛЕ»11-СИНЫФ ӨСӨН«ТУҒАН (БАШҠОРТ) ӘҘӘБИӘТЕ»,**
**УҠЫУ ПРЕДМЕТТАРЫ БУЙЫНСА**
**ЭШ ПРОГРАММАҺЫ**

**2023-2024 уҡыу йылы**

**«ТУҒАН (БАШҠОРТ) ӘҘӘБИӘТЕ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ПРЕДМЕТЫН ТӨП ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ КИМӘЛЕНДӘ ҮҘЛӘШТЕРЕҮҘЕҢ КӨТӨЛГӘН ҺӨҘӨМТӘЛӘР**

**шәхси һөҙөмтәләр:**

-шәхестең рухи-әхлаҡ сифаттарын камиллаштырыу, күп милләтле Ватанға һөйөү тойғолары, башҡорт һәм башҡа халыҡтарҙың әҙәбиәтенә ихтирам тәрбиәләү;

- танып белеү һәм коммуникатив мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн төрлө мәғлүмәт сығанаҡтарын файҙаланыу (һүҙлектәр, энциклопедиялар, Интернет-ресурстар һ.б.);

**метапредметһөҙөмтәләре (танып белеү, регулятив, коммуникатив):**

-проблемаларҙы аңлай белеү, гипотеза ҡуйыу, материалдарҙы структураға һалыу, үҙ позицияһын иҫбатлау өсөн аргументтар һайлау, телдән йәки яҙма текстарҙа сәбәп-эҙемтә бәйләнештәрен билдәләү, һығымталарҙы формалаштырыу;

- эшмәкәрлекте үҙ аллы ойоштороу оҫталығы, уны баһалау, ҡыҙыҡһыныу сфераһын билдәләү;

- төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары менән эшләү күнекмәһенә эйә булыу, уны табыу, анализлау, үҙ эшмәкәрлегендә файҙаланыу,

- үҙенең йәш мөмкинлектәренән сығып компьютер грамоталылығына эйә булыу, кәрәкле мәғлүмәт йыйыу маҡсатында Интернетҡа сыға белеү, тексты баҫыу, уны эшкәртә белеү,

-аңлы уҡыу күнекмәләрен үҙләштереү, төрлө стиль һәм жанрҙағы текстарҙы үҙ аллы уҡый белеү, текстың төп фекерен билдәләү, йөкмәткеһен еткерә алыу, уның буйынса һорауҙарға яуап биреү;

-сағыштырыу, анализ, синтез, дөйөмләштереү кеүек логик эшмәкәрлеккә эйә булыу, сәбәп-эҙемтә бәйләнештәрен һәм оҡшашлыҡты булдырыу;

әңгәмәсеһенең фекерен тыңларға һәләтле булыу, тикшерелгән предметҡа ҡарата үҙенең нигеҙле ҡарашын әйтә белеү һәм конфликлы хәлдәрҙән сыға белеү;

**предмет һөҙөмтәләре:**

1) танып - белеү сфераһында:

- башҡорт халыҡ ижадында һәм башҡа халыҡтарҙың фольклорында, боронғо әҙәбиәт вәкилдәренең, башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрендә күтәрелгән төп проблемаларҙы аңлау;

- художестволы әҫәрҙең яҙылыу дәүере менән бәйләнешен аңлау, унда сағылған ваҡыт, әхлаҡ сифаттары һәм уларҙың бөгөнгө көн яңырыуын асыҡлау;

- әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлай белеү, теге йәки был әҫәрҙең ниндәй жанр төрөнә ҡарауын билдәләү, темаһын, идеяһын, әхлаҡ пафосын аңлау, уның геройҙарына характеристика биреү, бер йәки бер нисә әҫәрҙең геройҙарын сағыштырып ҡарау;

- әҫәрҙең сюжетын, композицияһын, тасуири һүрәтләү сараларын билдәләү, әҫәрҙең идея-художество йөкмәткеһен асыуҙа уларҙың ролен аңлау (филологик анализ элементтары);

- әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлағанда элементар әҙәби терминдар менән эш итә белеү;
2) ҡиммәт-ориентация сфераһында:
- башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәтенең рухи-әхлаҡи ҡиммәттәре менән таныштырыу, уларҙы башҡа халыҡтарҙың рухи-әхлаҡи ҡиммәттәре менән сағыштырыу;
- башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәренә ҡарата уҡыусыларҙың үҙ ҡарашын булдырыу һәм уларҙы баһалау;
-өйрәнелгән әҙәби әҫәрҙәргә үҙ интерпретацияһын булдырыу (айырым осраҡтарҙа);
- автор позицияһын аңлау, уға ҡарата үҙ ҡарашын булдырыу;
3) коммуникатив сферала:
-төрлө жанрҙарҙа яҙылған әҙәби әҫәрҙәрҙе аңлы итеп уҡыу һәм уларҙың йөкмәткеһен адекват ҡабул итеү;
-проза әҫәрҙәрен йәки уларҙың өлөштәрен текста ҡулланылған башҡорт теленең тасуири һүрәтләү сараларын һәм цитаталар ҡулланып һөйләй белеү;
- тыңланған йәки уҡылған текст буйынса һорауҙарға яуап бирә белеү, телдән төрлө текстағы монолог телмәр төҙөү, диалог алып барыу оҫталығына эйә булыу;
-өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең тематикаһы, проблематикаһы менән бәйле изложение, инша яҙыу, класта һәм өйҙә ижади эштәр, әҙәби һәм дөйөм мәҙәниәт темаларына рефераттар яҙыу;
4) эстетик сферала:
-һүҙсәнғәтебулараҡәҙәбиәттеңобразлылыҡтәбиғәтенаңлау;
-әҙәбиәҫәрҙәрҙе эстетик ҡабулитеү, эстетик зауыҡ формалаштырыу;
-башҡорт һүҙҙәренең эстетик функцияһын, әҙәби әҫәрҙәрҙә художестволы образдар тыуҙырыуҙа тасуири һүрәтләү сараларының ролен аңлау.

Художестволы, фәнни-популяр һәм публицистик текстарҙы ҡысҡырып етеҙ уҡыу.
Тәҡдим ителгән ситуация буйынса һорауҙар бирә белеү, уҡытыусының (йәки башҡаларҙың) һорауҙарына яуап бирә белеү; яуаптарҙы дөрөҫ интонация менән асыҡ, аңлайышлы итеп әйтеү, һөйләү.
Яҙма йәки телдән сығыш яһау өсөн план төҙөй белеү.
Үҙ аллы уҡылған әҙәби сәнғәт әҫәрҙәренә яҙма йәки телдән баһалама бирә белеү.
Художестволы әҫәрҙәрҙе, фәнни-популяр һәм публицистика әҫәрҙәрен айыра белеү.
Яҙыусы һүрәтләгән художестволы картиналарҙы уй менән күҙ алдына баҫтырыу; бирелгән тема, һүрәт, картина буйынса һөйләй белеү.
Өйрәнелә торған әҫәр буйынса телдән һәм яҙма рәүештә фекер йөрөтөү характерындағы инша яҙыу, һорауҙарға тулы яуап биреү, геройҙарға индивидуаль, сағыштырма, төркөмләп характеристика биреү.
Программала күрһәтелгән шиғырҙарҙы яттан белеү; тексты икенсе телгә тәржемә итеп һөйләү.

Билдәле эйәле, билдәһеҙ эйәле, эйәһеҙ һөйләм, дөйөм эйәле һәм атама һөйләмдәрҙе айыра белеү; кешенең эске донъяһын, тәбиғәттең төрлөсә торошон, төрлө хәл-ваҡиғаларҙы ҡыҫҡа ғына һүрәтләү өсөн бер составлы һөйләмдәрҙе файҙалана белеү.

Художество әҫәрҙәре ( шул иҫәптән драма әҫәрҙәрен) тасуири уҡыу.
Уҡылған әҫәрҙәрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен яҙма йәки телдән һөйләп биреү.
Өйрәнелә торған әҫәр буйынса телдән һәм яҙма рәүештә фекер йөрөтөү характерындағы инша яҙыу, һорауҙарға тулы яуап биреү.
Яҙма йәки телдән сығыш яһау өсөн план төҙөй белеү.
Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү, диалогты дауам итә белеү;
Тексты икенсе телгә тәржемә итеп һөйләү;
14-16 шиғырҙы яттан тасуири итеп һөйләй белеү.
Тексты мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү, уларға исем биреү, план төҙөү;
Газет- журналдарҙан, китаптарҙан материал йыйып, хикәйә төҙөү;
Әҫәрҙән кәрәкле өлөштәрҙе һайлап ала белеүң
Һүҙбәйләнеш, һүҙбәйләнештә эйәртеүсе һәм эйәрсән киҫәктәрен ( аныҡлаусы, хәлдәр) айыра белеү.

**10-сы синыф**
**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

1. Белем көнө. ( 9 сәғәт).
1 сентябрь- Белем көнө, Ватан, тыныслыҡ, мәктәп, уҡыу һәм уға мөнәсәбәт тураһында текстар уҡыу дауам итә. Уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереү өҫтөндә эш даими дауам итә.
Мәктәп, Тыуған ил, тыуған төйәк хаҡында әңгәмәләр үткәреү.
Грамматика:
9-сы класта үтелгәнде ҡабатлау.
Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:
Күңел, һағыныу, тойғо, ғәзиз, күңелле, моң, төркөм, кәңәш, онотолоу, иҫтән сығыу, ғүмер, ҡыңғырау, мәктәп йылдары, заман, имтихан, хөрмәт, рөхсәт, һуңынан, бәхет, йүләр, кәйеф, бөтһе, дөрөҫ юл һайлау.

2. Башҡортостан ҡоштары. (8 сәғәт)
Башҡортостан ҡоштары, уларҙың көн итеүҙәре , һәр ҡош төрөнөң үҙенсәлекле яҡтары менән таныштырыу. Яҙыусы, шағирҙарҙың ҡоштар тураһында яҙған әҫәрҙәрен уҡыу. Улар ярҙамында уҡыусыларҙың һүҙлек байлыҫын арттырыу, телмәр үҫтереү. Башҡортостанда ҡышлаусы һәм осоусы ҡоштарға ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.
Грамматика:

Исемдең 1-се зат ялғауҙары.
Бер составлы һөйләмдәр.
Сифат дәрәжәләре.
Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:
Ҡоштар, ҡанат, ҡауырый, ҡарлуғас, һандағас, сәпсек, аҡ сәпсек, сәүкә, һайыҫҡан, һуйыр, ҡор, сел, ҡоҙғон. кәкүк, тумыртҡа, сыйырсыҡ, турғай, ҡарға, торна, бүҙәнә, бөркөт, ҡарсыға, төйлөгән, ҡарабаш турғай, һабантурғай, күгәрсен, файҙалы, ҡорт, зарарлы.

3. Башҡорт йолалары, ғөреф- ғәҙәтләре, әҙәп ҡәғиҙәләре. (6 сәғәт)
Башҡорт халҡының һаҡланып, быуындан-быуынға тапшырылып килгән йолалары, ғөреф-ғәһәттәре, әҙәп-ҡағиҙәләре менән таныштырыу, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Һәр йоланың үҙенсәлекле яҡтарын билдәләү, башҡорт халыҡ йолаларын башҡа халыҡ йолаларынан айырмалы яҡтарын билдәләй белеү. Күренекле шәхестәрҙең фәһемле һүҙҙәре, яҙыусы, шағирҙарҙың әҫәрҙәре менән танышыу.
Грамматика:
Бер һәм ике составлы һөйләмдәр.
Алмаштың килеш менән үҙгәреүе.
Ҡылымдың заман формалары.
Алмаш төркөмсәләре.
Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:
Йола, ғөрөф-ғәҙәт, әҙәп ҡағиҙәләр, ғаилә, тәрбиә, донъяға ҡараш, тыйыуҙар, тәртип, ғәҙәт, аралашыу, ҡунаҡсыллыҡ, бойороҡ, йомарт, сабырлыҡ, ололау, тыйнаҡ, намыҫлы, ышаныслы, һаҡлау, әссәләмәғәләйкүм, хәйерле көн (иртә. кис) , оҙон ғүмерле булһын! Ҡотло булһын! Еңел аяғың менән! Ҡул-аяғың еңел булһын! Һабантуй, ҡарға бутҡаһы, кәкүк сәйе, өмә. Ҡаҙ өмәһе. Һаумыһығыҙ,ауылдаштар! Аулаҡ өй, кис ултырыу.

4. Башҡортостанда ҡыш. (7 сәғәт)
Башҡортостанда ҡыш, унең билдәләре, балаларҙың ҡышҡы уйындары һәм байрамдары тураһында уҡыу. Тәбиғәтте күҙәтеү, ҡыш йәнлектәр һәм ҡоштар тормошо тураһында уҡыу, һөйләү, танышыу. Был турала уҡыусыларҙы дөрөҫ. Аныҡ. Тулы итеп һөйләрәгә өйрәтеү маҡсатын тормошҡа ашырыу өҫтөндә даими эш алып барыу.
Грамматика:
Һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре.
Алмаштың килеш менән үҙгәреүе.
Ҡылым формалары.
Ҡушма ҡылымдар.
Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:
Ынйы, ғәжәп, хайран ҡалыу, һуйыр, илгәҙәк, ҡоралай, юллатыу, шәм, бәҫ, тылсымлы, селтәрле, әңгәмә, тамаша, тантана, шыршы, саңғы, көрт, һырғалаҡ өйөү, һунар, өң, эҙ, айыу, ҡышҡы йоҡо, мылтыҡ, һыуыҡ,буран, өйөрмә, ҡояш байыйый.

Диалог темалары:
Тауҙа уйнағанда.
Яңы йыл байрамы.
Ҡыш һауа торошо.
Ҡыш тураһында һынамыштар, мәҡәл, әйтемдәр, йомаҡтар.

5. Һөнәрҙәр. (6 сәғәт)
Грамматика:
Ҡушма ҡылымдар.
Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:
Һөнәр, кәсеп, теләк, һайлау, оҫта, ялҡау, егәрле, уңған, үҙ эшен ярата, эшһөйәр, ҡулы оҫта, алтын ҡуллы, етеҙ, бейеүсе, йырсы, сәхнә оҫтаһы, быҙау ҡараусы, һауынсы, үлсәү, һыйыр һауыу, иртә, йылмайыу.

6.Башҡортостандың иҫтәлекле урындары.(7  сәғәт)
Башҡортостандың күренекле урындары тураһында уҡыусыларҙы һөйләргә өйрәтеү. Уҡыусыларға ла Башҡортостан Республикаһындағы данлыҡлы урындар тураһында материалдар йыйҙырыу, улар буйынса башҡорт телендә уҡыусылар менән уртаҡлаштырыу. Уҡыусыларҙа үҙ республикаһына , тыуған төйәккә ҡарата ғорурлыҡ тойғоһо тыуҙырыу.
Грамматика:
Тура телмәрле һөйләмдәр.
Эш-хәрәкәт һәм эшмәкәрлек ҡылымдары.
Телмәр ҡылымдары. Өн оҡшатыу ҡылымдары.
Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:
Мәмерйә, иҫтәлек, иҫтәлекле урын, тарих, һүрәт, баҫҡыс, быуат, таш кимтеге, тәрәнлек, боҙ, мәңгелек, осор, ҡарауылсы, музей, солоҡсолоҡ, һунарсылыҡ, кәшәнә, ғалимдар, мираҫ, тәбиғи ҡомартҡы, раҫлау, бейеклек, төрөү, баҫҡыс тутыҡҡан, өҫкө ҡат, донъя күләмендә.

7.Беҙҙең өсөн иң ҡәҙерле байрам. (9 сәғәт).
Ҡатын- ҡыҙҙар, һөйөклө әсәйҙәр тураһында һөйләшеү, уларға ҡарата  хөрмәт, уларға иғтибарлы, ихтирамлы булыуҙы тәрбиәләү.
Грамматика:
Ҡылымдарҙың башланғыс формаһы.
Элек, хәҙер, тормош, илау, сәңгелдәк йыры, иртә, наҙлы, ҡайғы килтереү, яратҡан, ғәҙел, хыял, хыялланыу, лайыҡ, мохтаж, батырлыҡ, серләшеү.

8. Башҡорт музыка ҡоралдары. (7 сәғәт)
Башҡорттарҙың рухи һәм материаль культураһында халыҡ музыка коралдарының әһәмиәтле урын алып тороуы менән таныштырыу.. Ул өлкәлә данлыҡлы кешеләрҙең тормош юлы һәм ижады менән танышыу. Улар тураһында уҡыусыларҙың дөрөҫ итеп һөйләүенә өлгәшеү.
Грамматика:
Бәйләүестәр. Ҡушма исемдең яһалышы.

Ҡылымдың киләсәк заманы.
Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:
Рухи донъя, музыка ҡоралдары, милли көй, башҡорт композиторҙары, боронғо ҡурай, ҡумыҙ, думбыра, ҡыл ҡумыҙ, һорнай, дөңгөр, мәғлүмәт, элек, быуат, сәсән, юлдаш, ил батырҙары, дан, тыуған ер, батша, хөкүмәт, ижад, өйрәнеү, тырышыу, яратыу, йырларға яратыу, көй сығарыу, композитор, үҙешмәкәр, йыр буйынса ярыш уҙғарыу, бер аҙ, талантлы, үткән йыл, Өфө сәнғәт институты, халыҡ артистары.

9. Бигерәк йәмле йәй көндәре. (9 сәғәт)
Бәйләнешле телмәр үҫтереү буйынса төрлө эш төрҙәре үткәреү. Йәй миҙгеле, байрамдар, һуңғы кыңғырау шылтырауы, йәйге ял темаһы буйынса әңгәмәләр үткәреү, текстар уҡыу.
Грамматика.
Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр.
Ҡыңғырау, оя, йорт, таныш исем, заман, ваҡыт, имтихан, бурыс, өлкән, юл, һанау, маҡсат, ашхана, таң, төндә, серҙәш, бөҙрә, яңғыҙ,бер үҙе, бер кем дә, кеçә, ҡулъяулыҡ, ялҡын, ял итеү, бейек, юғары, бөйөк, тәлгәш, тапшырыу, намыç, васыят, хәтерҙә, иçтә, өмөт, ышаныс, ғорур.

## 11-се синыф
## Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

Тыуған илем – Башҡортостан - 6 сәғәт
Башҡортостан, Башҡортостан Республикаһының Рәсәй кимәлендә тотҡан урыны, уның байлығы, күренекле шәхестәре, халҡы, батырҙары, сәнғәте хаҡында текстар уҡыу, әңгәмәләр, осрашыуҙар, экскурсиялар ойоштороу. 11-се класс уҡыусылары уҡығандары дөрөç, шыма итеп һөйләй белергә, әңгәмәлә еңел ҡатнаша, аралаша алырға тейеш. Диалогик, монологик телмәр менән эш итә белеүгә өлгәшергә кәрәк.
Грамматика:10-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Башҡортостан сәнғәте – 6 сәғәт.
Башҡортостан Республикаһында сәнғәт үçеше. Сәнғәт әһелдәре, улар хаҡында яҙылған текстар менән танышыу. Грамматика буйынса үҙләштерелгән материалды ғәмәлдә дөрөç ҡулланыуға өлгәшеү. Был тема буйынса уҡытыусынан һәм уҡыусыларҙан да ижади эш талап ителә.
Грамматика:Бер составлы һөйләм төрҙәре.
Кемдәр улар сәсәндәр? - 2 сәғәт.
Сәсәндәрҙең йәмғиәт тормошонда тотҡан урындары, уларҙың халыҡ шағирҙары, педагогы, тарихсыһы, ил-йорт аҡһаҡалы булыуы тураһында таныштырыу. Сәсәнлек сәнғәте. Исемдәре билдәле һәм әçәрҙәре хәҙергәсә һаҡланған сәсәндәр (Ҡобағош сәсән, Ҡарас сәсән, Ерәнсә сәсән, Буранбай – Йәркәй сәсән). Сәсәндәр ижадында фольклор һәм әҙәбиәт традициялары сағылышы.
Грамматика:Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр.

Башҡорт ырыуҙары,шәжәрәләре. – 2 сәғәт.
Башҡорт халҡының ырыуҙары менән танышыу. Башҡорт шәжәрәләренең яҙма ҡомартҡы булараҡ матур әҙәбиәткә мөнәсәбәте. Уҡыусыларҙың үҙ ырыу шәжәрәһен төҙөтөү, улар тураһында һөйләй белеү.
Грамматика:Ҡушма һөйләмдәр (ҡабатлау).
Башҡорт халыҡ шағирҙары, яҙыусылары – 18 сәғәт.
Башҡорт халыҡ шағир-яҙыусылары тураһында белешмә. Уларҙың тормош һәм ижад юлы менән таныштырыу. Уҡыусылар һәр шағир, яҙыусы хаҡында һөйләй белергә һәм уларҙың әҫәрҙәрен танып атай белергә тейеш. Бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү; текст өҫтөндә эшләүгә иғтибар арттырыу.
Грамматика: Эйә һөйләм. Эйәрсән хәбәр һөйләм.

## 10-сы синыф Туған башҡорт теле

## Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхсән, метапредмет, предмет һөҙөмтәләре.

**Туған (башҡорт) теле программаһын үҙләштереүҙең шәхсән һөҙөмтәләре:**

1)Башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли - мәҙәни ҡиммәттәре булараҡ аңлау,интеллектуаль, ижади һәләттәрен һәм шәхестең мораль - этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;
2)Башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли - мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; үҙ телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;
3)Аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

Төп дөйөм белем биреү мәктәбенең сығарылыш уҡыусыларының башҡорт теле программаһын үҙләштереүҙә шәхси һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:
1)Башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли - мәҙәни ҡиммәттәре булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләттәрен һәм шәхестең мораль - этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;
2)Башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли - мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; үҙ телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;
3)Аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

**Туған (башҡорт) телен үҙләштереүҙең метапредмет һөҙөмтәләре:**

1)телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү: аудирование һәм уҡыу:

*телдән һәм яҙма бирелгән мәғлүмәтте (коммуникатив йүнәлеш, теке темаһы, төп фекер; төп һәм өҫтәлмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;

*төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү);төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;

*төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп, адекват ҡабул итеү;аудирование менән эш итеү(һайлап алыу, танышыу);

*төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлелеге (матбуғат саралары, уҡыу өсөн тәғәйенләнгән компакт -дискылар, Интернет ресурстары); төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу; белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмаларҙан һайлап алыу күнекмәһен булдырыу;

*һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алыу, еткерә белеү;

*стилистик үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу;

һөйләү һәм яҙыу:

*алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең ( индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеге, эштең эҙмә -эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау, уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;

*тыңлаған йәки уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә( план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;

*төрлө телмәр стилендә һәм төрлө жанрҙарҙа аралашыу ситуацияһына ҡарап телдә һәм яҙма текст төҙөй алыу;

*телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, текст логик яҡтан эҙмә -эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;

*төрлө төрҙәге монологты (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү; төрлө төрҙәге монологтарҙың берләшеүе) һәм диалогты (этикетты үҙ эсенә алған, диалог - һорашыу, диалог - аралашыуға өндәү, диалог - фекер алышыу һ. б.; төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүе) үҙләштереү;

*ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистк нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе һаҡлау;

*телмәр этикет нормаларын һаҡлау, аралаша алыу,телмәр аралашыу процесында ым - ишара, мимиканы урынлы ҡулланыу;

*уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәреңде контролдә тота алыу; йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып,үҙ телмәреңде баһалай белеү;грамматик һәм телмәр хаталарын таба, уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;

*үҙ тиңдәштәрең аудиторияһында ҙур булмаған доклад, реферат менән сығыш яһау; бәхәстә, төрлө аргументтар ҡулланып, көнүҙәк проблемалар буйынса сығыштарҙа ҡатнашыу;

2) алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; туған телде башҡа төрлө фәндәрҙән белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу; тел күренештәрен анализлау буйынса алған белем һәм күнекмәләрҙе предмет - ара (сит тел, әҙәбиәт һ. б. дәрестәрҙә) ҡулланыу;

3)аралашыу процесында тирә - яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләү, бәхәстә, күтәрелгән көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу; формаль һәм формаль булмаған шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли - мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

1)телдең төп фукциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел һәм халыҡ мәҙәниәтенең бәйләнештәре тураһында, туған телдең кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;

2)гуманитар фәндәр системаһында туған телдең урынын һәм мәғарифтә тулыһынса уның ролен аңлау;

3)туған тел тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү; уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен аңлау;

4)тел ғилеменең төп аңлатмалары: лингвистика (тел ғилеме) һәм уның төп бүлектәре; тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог,диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары. Фәнни, публицистик, рәсми - эшлекле стилдәр, матур әҙәбиәт теле; функциональ - мәғәнәүи телмәр төрҙәре ( хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү); текст, текст төрҙәре, телдең төп берәмектәре, уларҙың билдәләре һәм телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен үҙләштереү;

5)башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын. Башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;

6)телдең төп берәмектәрен, граматик категорияларын анализлау һәм таныу, тел берәмектәрен аралашыу шарттарына ярашлы ҡулланыу;

7)һүҙгә төрлө анализ яһау төрҙәрен ( фонетик, морфематик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), һөйләм һәм һүҙбәйләнешкә синтаксик анализ, төп билдә һәм структура күҙлегенән сығып, күп аспектлы анализ яһау;

8)тел - һүрәтләү саралары һәм уларҙы уҡыусы телмәрендә ҡулланыу;

## Уҡытыу предметының курс йөкмәткеһе

**Тел һәм телмәр** –4 сәғәт Әҙәби тел – халыҡтың рухи ихтыяжын хеҙмәтләндереүсе нормалаштырылған тел. Телмәр культураһы.Телмәрҙең тасуирлығы,аныҡлығы, дөрөҫлөгө, теүәллеге.

**Лексика-** 4 сәғәт Лексиканың төп төшөнсәләре. Башҡорт теленең һүҙлек составы, уның үҫә барыуы һәм байыуы. Төрлө ҡатлам лексик берәмектәрҙеңҡулланыу үҙенсәлектәре. Фразеология. Башҡорт теле фразеологияһының үҫеүе һәм байыуының сығанаҡтары.Телмәрҙә фразеологик берәмектәрҙе ҡулланыу.

**Фонетика. Орфоэпия-**3 сәғәт. Фонетиканың төп төшөнсәләре. Телмәр өндәренең яһалышы. Графика һәм алфавит.Башҡорт теленең алфавиты.Һуҙынҡы өндәр. Тартынҡы өндәр.Тартынҡы өндәрҙең сиратлашыуы.Сингармонизм. Ассимиляция. Диссимиляция. Һүҙҙең баҫымы. Орфоэпия һәм орфография.

**Һүҙ составы һәм һүҙьяһалыш** – 2 сәғәт Тамыр һәм яһалма һүҙ. Һүҙ һәм форма яһаусы ялғауҙар.Һүҙ үҙгәртеүсе ялғауҙар. Ҡайһы бер ялғауҙарҙың күп мәғәнәлелеге, омоним ялғауҙар.

**Грамматика. Морфология** -15 сәғәт Һүҙ төркөмдәре системаһы.Һүҙҙәрҙе һүҙ төркөмдәренә бүлеүҙең принциптары. Телмәрҙә үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең роле. Һүҙҙең грамматик мәғәнәһе.Һүҙ формаһының барлыҡҡа килеү ысулдары, уларҙың һүҙбәйләнеш һәм һөйләм эсендә урыны, тәғәйенләнеше.Һүҙ төркөмдәренең төп категориялары.Һан, эйәлек заты, хәбәрлек заты, килеш. Килештәрҙең мәғәнәләре.

**Яҙма эштәр**- 6 сәғәт